# Рухи байлыҡ-мәңгелек!

Йәш быуындың яҙмышы, шәхес үҫтереүҙе хәстәрләп, уҡытыусылар һәр ваҡыт ғаиләләр менән бергә эшләргә, ата-әсәгә бала тәрбиәләүҙә булышлыҡ итергә тырыша. Ғаиләлә ата-әсәнең роле юғары булғанда ғына ул рухи тәрбиәнең сәңгелдәге була ала.

Ғаиләлә бала тәрбиәләү кешелек донъяһы өсөн һәр ваҡыт көнүҙәк мәсьәлә булып һаналған. Заманалар үҙгәреп тора, оло быуынды йәш быуын алмаштыра, тормоштоң һәр өлкәһендә үҙгәрештәр, яңы ҡараштар, фекерҙәр барлыҡҡа килә. Ә бала тәрбиәләү һәр заманда ла изге эш, ата-әсәнең төп бурысы булып ҡала, сөнки баланы эшсән, намыҫлы, әҙәпле, миһырбанлы, үҙ халҡының патриоты итеп тәрбиәләү – бөтә милләттәр өсөн дә уртаҡ маҡсат.

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадына, ҡомартҡыларына иғтибар итһәк, ата-бабаларыбыҙҙың йәш быуынды тәрбиәләүгә бик етди ҡарағанын күрербеҙ. Йәш быуынды тәрбиәләү өсөн берҙән-бер дөрөҫ юл – халыҡ педагогикаһын тергеҙеү. Ата-бабаларыбыҙҙың алтын аҡылына, тормош тәжрибәһенә таянып эш итергә кәрәк беҙгә.

Бала күңеле бик нескә. Ул бөтә нәмәне күңеленә яҡын ала, өлкәндәр иғтибар итмәгән нәмәләрҙе лә күҙ уңынан ысҡындырмай, бөтәһен дә һиҙә. Тик үҙен борсоған мәсьәләләрҙе кемгәлер һөйләргә кәрәклекте, кәңәшләшеүҙе белмәй. Барыһын да эстән кисерә, йөрәге яна, әрней, көйә, ғазаплана. Шуға күрә татыу булмаған ғаиләләрҙә үҫкән балаларҙың бәләкәйҙән үк нервылар системаһы боҙола. Улар йә тиҙ ҡыҙып бара, йә ҡырыҫ, тупаҫ була, йә үҙ эсенә бикләнеп, йомоҡҡа әйләнә. Һәр яҡлап үҫешкән кеше тәрбиәләү ҡатмарлы, оҙаҡ ваҡыт талап иткән процесс. Бала тәрбиәләүҙә ғаилә һәм мәктәп берҙәмлеге кәрәк.

Ошонан сығып методик тема һайланды.

**Тема:** Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә әсә телен камил белеүсе, ижади фекерләүсе, бай рухлы шәхес тәрбиәләү

Киң белемле, эрудициялы булыу – хәҙерге заман кешеһенең әйҙәүсе сифаты.

**Проблеманың актуаллеге:** Башҡорт телен иң беренсе үҙебеҙҙең милләт белһен, тип эшләйбеҙ. Диалект шарттарында башҡорт теленә ихтирамлы ҡараш, башҡорт халҡының милләт буларaҡ һаҡланып ҡалыу хоҡуғына

теләктәшлек тәрбиәләү. Башҡорт балаһына ата-бабаларыбыҙҙың изге аманатын ғәзиз телебеҙ аша еткерә алыу, уның генетик хәтерен уятыу мотлаҡ.

**Эҙләнеү объекты-**ул уҡыусы эшмәкәрлеге. Баланы туған телендә матур итеп һөйләй, уҡый, яҙа, үҙ халҡының мәҙәниәтен, тарихын белеүсе, милли һәм донъяуи мәҙәниәтте үҙләштергән юғары интеллектлы, белемле, талантлы, аңлы шәхес итеп тәрбиәләү маҡсаты ята.

**Эҙләнеү предметы:** Әсә телен камил белеүсе, ижади фекерләүсе, бай рухлы шәхес тәрбиәләүгә ярҙам итерлек яңы технологияларға мөрәжәғәт итеү, этнопедагогиканы төп нигеҙ итеп алыу.

**Маҡсатыбыҙ: лингвистик компетентлы**, тел фәне нигеҙҙәрен белгән,**тел компетентлы**, тел системаһын ғәмәли белгән, уның һүҙлек һәм грамматик төҙөлөшө менән таныш булған, **коммуникатив компетентлы**, башҡорт телендә иркен аралаша алырлыҡ уҡыусыларҙы илһөйәр шәхес итеп тәрбиәләү.

**Бурыстар:** Был маҡсатҡа ирешеү өсөн ярашлы юлдар һайлау бурысы тора.

1. Алдынғы педагогик тәжрибәне дөйөмләштереп, дәрестәрҙә ҡулланыу.
2. Уҡыусыларҙа төплө белем биреү маҡсатында үҙ аллы педагогик методтар ижад итеү.
3. Халыҡ педагогикаһына таяныу.

**Гипотеза:** Тел өйрәнеүҙе лингвокультурологик нигеҙҙә ҡороп, шуның менән уҡыусының ҡыҙыҡһыныуын арттырып, уңышҡа өлгәшергә була тигән ышаныс бар. Инновацион технологияларҙың талапҡа яраҡлыһын һайлап, этнопедагогикаға нигеҙләнгән саҡта ғына эшебеҙ уңышлы барасаҡ.

Темабыҙ “Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә әсә телен камил белеүсе, ижади фекерләүсе, бай рухлы шәхес тәрбиәләү” булғас, уны асыу этаптарына, принциптарына ла ентекләберәк туҡталайыҡ:

- Башҡорт теле- башҡорт донъяһына асҡыс.
- Башҡорт телендә Башҡортостандың, башҡорт халҡының тарихы, менталитеты, мәҙәниәте сағыла.

Шулай уҡ белем биреүҙең заманса стандарттарын ҡарап үтәйек. Яңы быуын стандарттары кеше шәхесенең үҫешен, операциональ компетентлыҡтың мөһимлеген алға ҡуя. Этнопедагогиканы алһаҡ та шул уҡ ҡиммәттәр тора. Туған тел, милләт, ил яҙмышы, ере, халҡы менән ғорурланған

быуын тәрбиәләү,  йәмғиәтебеҙ ҙур үҙгәрештәр кисергәндә милли ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы тергеҙеү, милләтте һаҡлау, баланы билдәле бер этностың вәкиле булараҡ шәхес итеп формалаштырыу – бөгөн көнүҙәк проблема.

Беҙҙеңсә, этнопедагогикаға таянып уҡытыу – заман талабы. Бөгөнгө көндә төрлө яҡлап төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәттәр яуа. Беҙҙең уҡыусыларыбыҙ “тормош”исемле юлдың сатында аҙашмай, һәр саҡ яңылыҡҡа ынтылырға, яҡшыһын яманынан айырып, киләсәктең ярһыу толпарын эйәрләй алырҙай алмаш булып үҫергә тейеш.

Юғары һөҙөмтәләргә ирешеү өсөн критик фекерләүҙе үҫтереү технологияһы, коммуникатив-мәғлүмәти, хеҙмәттәшлек итеү,проект технологиялары тәғлимәтен башҡорт халыҡ педагогикаһы менән берлектә ҡулланабыҙ.

Беҙгә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары иңенә ҙур яуаплылыҡ һалынған. Уҡыусыларыбыҙ күңеленә тәрбиә орлоҡтары һалырға хәлебеҙҙән килә.  Быға беҙгә бөтә нәмә лә хеҙмәт итергә тейеш. Ә бит  баланы билдәле бер этностың вәкиле итеп тәрбиәләп кенә шәхес формалаштырырға мөмкин.